***Рафаэль АҘНАҒОЛОВ,***
***педагогия фәндәре докторы***

# Ижад үрҙәре бейек

Филология фәндәре докторы, профессор, академик Алмас Шәйхулов, уның фәнни эшмәкәрлеге тураһында яҙырға булғас, байтаҡ хеҙмәттәрен ентекләп өйрәнеп сыҡтым. Уның «Иҙел-Кама-Урал этнолингвистик мөхитендә йәшәүсе төрки, монгол, фин-уғыр һәм һинд-европа халыҡтарының рухи мәҙәниәте» ғилми-тикшеренеү лабораторияһында ла йыш ҡына булырға тура килде. Лабораторияның исеме ҙур булһа ла, биләгән бүлмәһе тар, ҡыҫыҡ: ҡайҙа ҡарама, китаптар өйөмө, картотека шкафтары, диалектология фәне буйынса тупланған папка-папка экспедиция материалдары, тел, ерле һөйләш, ер-һыу атамалары (топонимдары) үҙенсәлектәрен бәйән итеүсе информаторҙарҙың фотоһүрәттәре тупланған төрлө альбомдар, конференция мәғлүмәттәре, унда һөйләнгән докладтар йыйылмаһы һәм башҡа күргәҙмә әсбаптар.

Лаборатория 1987 йылда асылған. Быйыл уның рәсми статус алыуына егерме йыл. Белем, фән донъяһында был аҙ ғүмер түгел. Ана шул осор эсендә лаборатория ниҙәр эшләгән? Ниндәй йүнәлештәре бар? Күҙгә күренерҙәй ниндәй монографиялар, фәнни йыйынтыҡтар, уҡыу әсбаптары, программалар, брошюралар баҫылып сыҡҡан? Лабораторияның ҡаҙаныштары низә күренә? Һәм, ғөмүмән, лабораторияның грифы менән берәй китап баҫылдымы икән? Бына ошо һорауҙар мине ҡыҙыҡһындырҙы. Лабораторияның статусы ҙур ғына. Ул — татар филологияһы кафедраһының ғына филиалы түгел, ә тотош университет кимәлендәге гуманитар фәндәр буйынса ғилми-тикшеренеүҙәрҙе ойоштороусы үҙәк. Ғилми эҙләнеүҙәрҙең иң төп проблемаһы буйынса ғалим А.Шәйхулов халыҡ-ара симпозиумдарҙа, фәнни-теоретик конференцияларҙа әүҙем ҡатнаша.

Алмас Шәйхуловтың төп тикшеренеү проблемаһы беренсе ҡарашҡа әллә ни ҡатмарлы ла түгел кеүек, әммә, дөрөҫөн әйткәндә, бер ни тиклем бәхәсле лә, сөнки ул телебеҙҙең сал тарихына барып тоташа. Мәҫәлән, уның концепцияһы буйынса һүҙҙең тамыры, йәғни асыл мәғәнәһе (русса «корневая морфема слова» йә этимон) бына ошолай күҙаллана (таблицаны ҡара):




Миҫал итеп алынған ошо һүҙҙәрҙең тамыры — ***йо-**. Тимәк, был оя һүҙҙәрҙең ба-

рыһы өсөн дә ***йо** компоненты уртаҡ, йәғни уларҙың этимонын аңлатҡан тамыр. Ул саҡта **л, м, ҙ, ҡ** элементтары ниндәй грамматик функция үтәй?

Телмәрҙә һүҙ төрлө грамматик мөнәсәбәткә инә. Һүҙ яһаусы, һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар тамыр һүҙгә ҡушылып, ана шул мөнәсәбәт, мәғәнә билдәләрен белдерә. Ә бит ялғауҙар тамырҙың сиген күрһәтеүсе элементтарға ялғана бара түгелме ни? Тимәк, **йо-л, йо-м, йо-ҙ** һәм башҡа һүҙ тамырҙарының ҡоролошонда **л, ш, ҙ** күрһәткестәре тамыр һүҙҙең сиген белдереүсе фонетик компоненттар. Алмас Шәйхуловтың фекеренсә: **йо-л, йо-м, йо-ҙ (аҡ)** һәм башҡа һүҙҙәрҙең тамыры фәҡәт бер ижектән тора. Мәҫәлән, **йо-**, ә ҡалған өндәр **л, м, ҙ** этимондар аңламын формалаштырыу вазифаһын башҡара. Этимонды башҡортсаға тарихи тамыр-күрһәткес тип тәржемә итергә лә булалыр. Алмас Ғәлимйән улы әйтеүенсә, ана шул этимондарҙы белмәү арҡаһында һүҙ тарихын (этимологияһын) асыҡлаған саҡта етди хаталарға юл ҡуйыла. Бында, әлбиттә, Урал-Алтай телдәре өлкәһендә бөйөк ҡаҙаныштарға өлгәшкән мәшһүр ғалимыбыҙ Жәлил ағай Кейекбаевтың яҡын (йыраҡ) йәки ҡәрҙәш телдәр төркөмөнөң этногенетик сығышын билдәләү өсөн фәнни яҡтан тәрән дәлилләнгән билдәлелек-билдәһеҙлек теорияһына шаҡтай уҡ яҡын килгән бер аңлам бар. Алмас Шәйхулов тик был аңламды тамырға ҡушылып килгән ялғау итеп түгел, бәлки, оялаш һүҙҙәрҙә бер ижекле тамырҙың өсөнсө өнө этимондың мәғәнәһенә өҫтәмә төшөнсә бирә, тигән фекерен алға һөрә. Был йәһәттән ғалимдың (М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты Н.У.Хәлиуллина менән берҙәмлектә) нәҡ ошо маҡсат менән төҙөлгән «Тюркские языки Урало-Поволжья в контексте алтайского языкового сообщества (опыт лексико-семантического и идеографического словаря)» (Уфа, 2004) исемле ике томлы һүҙлеген әйтеп китергә мөмкин. Унда 19 мең һүҙ реконструкциялана.

Шулай итеп, Алмас Шәйхулов төрки, Урал-Алтай телдәрендәге һүҙъяһалыш, һүҙҙең тамыры кеүек тамам ныҒынған төшөнсәләрҙе билдәле дәрәжәлә кире ҡаға. Шуныһын да әйтеп уҙайыҡ: уның концепцияһы ғалимдар араһында, аксиоматик күренеш булараҡ, яй ғына тарала. Быныһы — ғалимдың үҙ ҡарашы, тел күренештәренә үҙ мөнәсәбәте. Иң мөһиме шунда: башҡа ғалимдарҙың уйҙарына ла төшмәгән тел күренештәрен аңлауға, күрә белеүгә эйә ғалимдың гипотезалары, концепциялары дөйөм тел ғилемендә яҡлау табырына өмөт итәйек.

Профессор Алмас Шәйхулов юғары уҡыу йорттары, ҙур фәнни үҙәктәр менән бәйләнешен өҙмәй. Ул тормоштоң, кешеләр мөнәсәбәттәренең ығы-зығыһын һөйләп, коллегаларының ваҡытын алмай, әммә уның менән бер осрашһаң, айырылып китеп тә булмай, үҙенең фән өлкәһендәге ҡайһы бер гипотезаларға ҡарата шәхсән ҡарашын белдерергә тырыша. Фәнгә бағышланған ғүмер эйәһе шулай булырға тейештер, күрәһең.

Ҡоштарҙың ҡанаты ҡағынғанда нығый. Ғалим кеше лә үҙенең ғилми асыштары менән төрлө кимәлдә уҙғарылған конференцияларҙа әүҙем ҡатнашырға тейештер. Ғалим коллегалары менән аралашҡанда үҫә, абруйы арта, дәрәжәһе күтәрелә. Был йәһәттән ҡарағанда, төрлө аудитория-

ларҙа, бигерәк тә халыҡ-ара конференцияларҙа унан да күп ҡатнашҡан ғалим юҡтыр, минеңсә.

2000 йылдың 18 декабрендә уны Халыҡ-ара тәбиғи фәндәр академияһы Евразия бүлегенең тулы хоҡуҡлы ағзаһы итеп һайлайҙар һәм диплом тапшыралар.

## Һүҙ тарихы — халыҡ тарихы

Һүҙҙә халыҡ тарихы ята. Һүҙ — телмәр коды. Ана шул код проблемаһына, йәғни телмәр ҡоролошона ғалимдар араһында ошо көнгә тиклем берҙәм һәм нығынған ҡараш булманы. Һүҙҙе үҙ аллы һүҙ итеүсе форма һәм мәғәнә төшөнсәләре тора. Һүҙҙең формаһы тамыр һүҙҙән һәм төрлө грамматик, логик мөнәсәбәтте белдереүсе ялғауҙарҙан (аффикстарҙан) тора. Ҡайһы бер телселәр ялғауҙарҙа ла айырым мәғәнәгә эйә булған һүҙҙәрҙе күрергә тырышты, шуның менән бергә һүҙгә һалынған мөнәсәбәтте инҡар итеп маташты.

Тел — һәр халыҡтың этник мәҙәниәте нигеҙе. Улар мәғәнә һәм мөнәсәбәт яғынан да бер-береһенән шаҡтай айырыла. Хатта үҙ-ара ҡәрҙәш тип аталған төрки телдәрендә лә мәғәнә һәм мөнәсәбәт формалары күп осраҡта тап килмәй. Төрки телдәренең ҡыпсаҡ һәм уғыҙ тармаҡтары бар. Шулай уҡ сингармонизмлыһы һәм сингармонияға буйһонмаған телдәр ҙә бар. Шуға күрә бер телдәге ҡалын өндәр (бигерәк тә һүҙҙең архаик һәм хәҙерге тамырын билдәләгәндә) икенсе телгә ярап бөтмәҫкә лә мөмкин. Мәҫәлән, башҡорт телендәге **ҡарағат, муйыл, сәскә, осҡат** һүҙҙәре татар телендә **карлыган, шоморт, чәчәк, зелпе** булып нығынып ҡалған. Һәр һүҙҙә, төшөнсәлә тарих, халыҡ тарихы ятҡанын иҫәпкә алғанда, тамыр һүҙ һәм уның мөнәсәбәтте, мәғәнәне белдереүсе ялғауҙары араһында ла айырма байтаҡ ҡына.

Алмас Шәйхуловтың күпселек хеҙмәттәре бер ижекле тамырҙан торған һүҙҙәргә арналған. Ана шуларҙың ҡоролошо һәм идеографик парадигмаһы тикшерелә. Мәҫәлән, ул шундай миҫал килтерә: **у** (һуҙынҡы өн, татар телендә), **ыу** (һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, башҡорт телендә). Бында ике һүҙ ҙә бер үк мәғәнәне аңлата. Әммә татар телендәге **у** фәҡәт бер һуҙынҡыны ғына аңлатамы икән? Шул формаларҙы ҡулланып икенсе һүҙ, ике ижекле тамыр яһап ҡарайыҡ: **у-г-ыз**. Бында ниңә **г** (башҡортса **ғ**) өнө барлыҡҡа килде һуң? Тимәк, тәүге миҫалда татар телендәге **у** фәҡәт һуҙынҡы өндән тормағанлығын ана шул юл менән асыҡлап була.

Быны менән нимә әйтергә теләйем? Алмас Ғалимйән улының эҙләнеүҙәр, тикшеренеүҙәренең методикаһы һәм методологияһы бик киң һәм тәрән. Ә инде күҙ ҡарашы етмәҫ киңлектәрҙә, аяҡлап булмаҫ тәрәнлектәрҙә ҡайһы бер кәмселектәрҙең һирәк-һаяҡ күҙгә салыныуы ла мөмкин. Билдәле булыуынса, ундай «кәмселектәр» башҡа эҙләнеүселәргә яңыса фекер йөрөтөргә юл аса. Ғилми тикшеренеүҙәрҙең мәғәнәһе лә ана шундалыр.

Һәр һүҙ, һәр тамыр һүҙ — үҙе бер донъя. Ул донъяның (бигерәк тә төрки тамыр һүҙҙең) тарихы ла бик тәрәндә ята. Ана шул тарихта халыҡтың донъяға ҡарашы (философияһы), рухы (психологияһы), ина-

ныуҙары (мифологияһы), йәшәү рәүеше (этник мәҙәниәте) ята. Халыҡта «Белем алыу — энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу» тигән әйтем бар. Һүҙ тамырындағы тәрән тарихты беҙ энә менән ҡаҙып сығарырға тейешбеҙ. Ғүмер уҙа, ашығырға, йәш быуынға үҙебеҙҙең методологик ҡарашты тапшырып ҡалырға кәрәк. Ғилми тикшеренеүҙәрҙе евроцентризм күҙлегенән түгел, минеңсә, азиялылыҡ хәтеренән сығып алып барыу кәрәктер. Фәндәге һәм, ғөмүмән, тормоштағы евразиялылыҡ тигән уйҙырманы ялған принципты мин өнәп етмәйем. Азиялылыҡ киңлегендә ялған, донъяны шаулатҡан бөтә төр ҡаҙаныштарҙы евроцентризм ҡаҙанына ауҙарыу — кемгәлер ҙур табыш килтереүсе сәйәсәт уйыны. Ә һәр уйын ҡомарлы. Ана шул ҡомарлы сәйәсәттән ситтәрәк тороу кәрәктер ғалимдарға, минеңсә.

## Иҙел кискән — ил күргән

Сит ил мөхитенең конференция залдарында үҙендең ғилми асыштарың тураһында доклад һөйләү Алмастың бәхетенә төшкән көмөшөләр. Ғалимға Төркиәлә лекция уҡырға, Германияла, Венгрияла, Кипрҙа, Японияла докладтар һөйләргә насип булған икән — был инде үҙе үк профессор Алмас Шәйхуловтың фән офоҡтарының киңәйеүен күрһәтә. Ғалим сит ил коллегаларының сығыштарын тыңлап, уларҙың көнкүрештәре менән танышып, сит мөхиттәге фән үҫешен үҙебеҙҙең илдәге ғилем донъяһы менән сағыштырып ҡарап, ҡөҙрәт кенә түгел, рухи аҙыҡ алып, күңел күҙе асылып та ҡайта. Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтергә кәрәк: сит илдә ижад, фән кешеһенә мөнәсәбәт тә һәйбәт. Уларҙың хеҙмәте меңәрләгән долларҙар менән баһаланғанда, Рәсәй ерлегендә бил бөккән ғалимдарҙың фән һәм ижад эшмәкәрлеге тиндәр менән генә үлсәнә. Сит ил бизмәне, күрәһең, хеҙмәт кешеһен ғәҙел баһалай.

Профессор Алмас Шәйхуловтың исеме төрлө энциклопедияларҙа (үҙәктә донъя күргән) урын биләй. Был да уның фәндәге ҡаҙаныштарына баһа. Сит илдәрҙә донъя күргән ҡайһы бер журналдарҙың редколлегия ағзаһы булып тороуы ла төрки телдәр ғилемендә уның абруйын арттыра төшә.

«Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә», — ти халыҡ. Иҙел кисеп, ил күрмәйенсә, башҡа мөхит ғалимдары менән аралашмайынса, фәндә шымарып, үҙ һәләтеңде, үҙ ҡарашыңды, концепциянды, методологиянды артабан үҫтереп булмайҙыр ул. Үҙ ҡаҙаныңда ғына ҡайнап, фәнде үҫтереп, уның менән бергә үҙең дә үҫеп булмаясағын Алмас күптән төшөнгән инде.

## Иҙел күрмәй, итек сисмә

Фәндә үҙеңә таяныс булырҙай арҙаҡлы ғалимдар булмаһа, яңғыҙ ҡарға яҙ килтерә алмай. Кемдәр һуң Алмас Шәйхуловтың ҡанаттарына ҡөҙрәт, фәнни тикшеренеүҙәренә дәрт биреп тороусы изге заттар?

А.Ғ.Шәйхуловҡа фән юлына иң беренселәрҙән булып Башҡорт дәүләт университетында ҙур абруй ҡаҙанған арҙаҡлы ғалим һәм яҙыусы Суфиян Поварисов үҙенең фатихаһын биргән, Мәскәүгә аспирантураға юлланырға изге теләктәрен теләгән. Мәскәү Тел ғилеме институтында

шулай уҡ уны Әҙһәм Рәхим улы Тенишев, Николай Александрович Баскаков, Әхнәф Әхмәт улы Юлдашев, Борис Александрович Серебренников, Эрванд Владимирович Севортян, Людмила Александровна Покровская, Григорий Церенович Пюрбеев, Лия Сергеевна Левицкая, Галина Федоровна Благова, Владимир Андреевич Никонов, Александра Васильевна Суперанская, Наталья Владимировна Подольская, Анна Владимировна Дыбо һәм башҡа бик күп атаҡлы фән әһелдәре үҙ ҡанаты аҫтына алған. Уларҙың ихлас ҡарашынан, эскерһеҙ ярҙамынан, хәтерендә байытырҙай фәһемле, йәнеңдә иретерҙәй ғыймлы һүҙҙәренән көс алған йәш ғалим донъяға үҙ тауышын яңғырата. Мәскәү Тел ғилеме институтында Алмас үҙенең кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертацияларын уңышлы яҡлай.

«Иҙел күрмәй, итек сисмә» тигән әйтемдең төп мәғәнәһе шулдыр: күрер, кисерер ауырлыҡтарыңды алдан аңғармай тороп, яңы эшкә тотоноуҙан фәтүә булмаҫ. Ысынлап та, фән өлкәһендә Алмас был әйтемгә тоғро ҡала. Шулай уҡ ул, ете тапҡыр үлсә, бер тапҡыр киҫ, тигән халыҡ аҡылын да күҙ уңынан ысҡындырмай. Был инде ғалим кешене биҙәй торған сифаттар. Баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәренең ғалимдар араһында, фән мөхитендә хуплап ҡаршы алыныуы ана шунан да киләлер, моғайын.

## Кеше эше менән бөйөк

Эшең ниндәй, үҙең дә шундай. Был тормошта кеше эше менән ихтирам ителә, дан ҡаҙана. Алмас Шәйхуловтың хеҙмәттәре, ғилми тикшеренеүҙәре менән мин танышмын. Берәй яңы китабы донъя күрһә, автограф яҙа һалып, бүләк итеп китә.

Тормош юлдары ҡатмарлы булған һымаҡ, фән бураҙналарын ярыу бигүк еңелдән түгел. Алмас Шәйхулов та быны яҡшы аңлай. Киләсәк быуын алдындағы бурыс, ғалимлыҡ выжданы, кешелек рухы, күңел донъяң талабы фәнни ижад менән шөғөлләнеүгә этәрә. Алмастың ғалимлыҡ эшмәкәрлеген, фән өсөн арымай-талмай хеҙмәт итеүен күҙ алдына килтерер өсөн һуңғы йылдарҙа донъя күргән китаптарын һанап сығыу ҙа етә: «Структура и идеографическая парадигматика односложных корневых основ в кыпчакских языках Урало-Поволжья (синопсис и таксономия когнитивной сферы «Природа (живая и неживая)» в континууме обще- и межтюркской лексики)», «Односложные корневые основы в кыпчакских языках Урало-Поволжья (опыт синхронической и диахронической характеристики)», «Введение в изучение алтайских языков. Учебное пособие по спецкурсу» һәм башҡалар. З.М.Рәимғужина менән бергә ул «Башкирские и татарские имена собственные», «Башкирские и татарские личные имена тюркского происхождения» тигән китаптар сығарған.

Академик Алмас Шәйхулов — булмышы менән фән кешеһе. Ул — 346 фәнни хеҙмәттең авторы. Уның исеме республикала ғына түгел, ә бөтә Рәсәй һәм донъя фәнендә танылыу яуланы. Исеме күренекле ғалимдар иҫәбендә энциклопедияларға индерелгән. Был инде ғүмерҙең мәғәнәле булыуына бер дәлилдер.